*Дамир КҮСКИЛДИН*

# Кинйәбулат шәжәрәһе

Башҡортостанда VII—VIII быуаттарҙа ер бүленештәре формалаша. Ул бүленеш ырыу исемдәре менән бәйле: эпостарҙа, шәжәрәләрҙә төбәктәр үҫәргән, ҡыпсаҡ, бөрйән, табын һәм башҡалар ере тип атала. Ҡайһы бер осраҡта үҫәргән иле, табын иле тип тә йөрөтөлә. Сыңғыҙхан заманынан (ҡайһы бер тарихсылар фекере буйынса, уға тиклем дә) Башҡортостан 4 өлкәгә бүленә, улар даруға тип атала, йәғни юл — Ноғай юлы, Болғар юлы (XIV быуаттан Ҡазан юлы), Себер, Уса юлы. Дөрөҫө Ноғай даруғаһы булырға тейеш, ләкин һуңынан халыҡ телендә Ноғай юлы тип йөрөтөлә.

Үҫәргән ере Ноғай юлында була, ә уның сиктәре Волганан, Оло Ырғыҙ тамағынан Асыуҙы (XIX быуаттан Учалы) күлдәре яҡтарына, Тубыл (Тобол) йылғаһының башына тиклем ҙур ерҙе тәшкил иткән.

Юлдар улуҫтарға (волость) бүленә, ә улуҫтар башта ырыу исемдәре менән бәйле була — Үҫәргән, Ғәйнә, Юрматы улуҫы, йәғни ошо ырыу биләгән ер. XVIII быуат башында Ноғай юлы 20 улуҫҡа, Себер юлы — 24, быуат аҙағында, 1795 йылда, Ноғай юлы 28 улуҫҡа бүленә. Тимәк, улуҫтар — башҡорт ырыуҙарының һәм түбә-аймаҡтарының биләгән ерҙәре.

1744 йылда Ырымбур губернаһы төҙөлә, ул 1781 йылдан өйәҙҙәргә бүленә, өйәҙҙәр — улуҫтарға. Улуҫтар менән һайланып ҡуйылған, батша сатраптары раҫлаған бей, тархан (һуңынан старшина) идара итә.

Старшинаның хакимлығы, абруйы ҙур була. Уның төп эше улуҫтарҙа тәртип булдырыу, ҡазый эшен башҡарыу, ил сиген һаҡлауҙы ойоштороу, үҙ ваҡытында халыҡтан яһаҡ йыйыу һ.б. Мәҫәлән, яһаҡ кенәгәһе буйынса, Үҫәргән улуҫы старшинаһы Ҡыуат Кинйәғолов XVIII быуат уртаһында йылына 300—400 һуҫар йә төлкө тиреһе тапшыра. Был эште һуңғараҡ урыҫтар үҙҙәре башҡара, әлбиттә, үҙ файҙаһына. Старшиналарға йөҙбашы (сотник), яһауыл, урядниктар ярҙам итә.

Кинйәбулат Ҡаҙбулат улы Йомаҡаев йөҙбашы була. Ул 1780—1860 йылдарҙа йәшәй. Ауыл 1857 йылдан уның исемен йөрөтә. Ә уға тиклем Ҡарағай туғай утары тип атала. Архив документтары буйынса, Ҡарағай туғай утар булып 1776 йылда Урмансы ауылынан (хәҙерге Ибрай ауылы, Ейәнсура районы) айырылып сыға. Тәүҙә утарға 4—5 хужалыҡ туплана. Халыҡ йылға буйына, Йылан тауҙың иң көньяҡ моронона яҡыныраҡ Иҫке ҡый тирәһенә күсә. Бер аҙ йәшәгәс, үргәрәк, хәҙерге урынына күсеп ултыра, сөнки түбәндә яҙ көндәре һыу баҫыу

осраҡтары булғылай. Ул замандарҙа Оло Һүрәм йылғаһы тулы һыулы булып аға, яҙғыһын ярҙарынан тулып таша.

Ауылда күпселекте үҫәргән ырыуы сураш араһының Йомаҡай түбәһе (аймағы) тәшкил итә. Аймаҡты башлап ебәреүсе — Йомаҡай (Йомағәли) Мырҙағәлиев сама менән 1720 йылда тыуған. Урмансы ауылынан яңы урынға күсеү эшен Йомаҡай башлап ебәрә. Ул һәр теләгән кеше менән бер ауылда торорға ниәтләмәй, тик яҡын туғандары, арҡадаш булырлыҡ, ышаныслы кешеләр менән яңы урында төйәкләнергә тәүәккәлләй. Ул ваҡытта иң яҡын таянысы — улы Ҡаҙбулатҡа 26 йәш, икенсе улы Биксәнтәйгә 13 йәш була.

XIX быуат башында көн иткән кешеләр тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте 1816 йылда үткәрелгән рәүиздән (ревизская сказка, перепись) белеп була. Ул рәүиздә Урмансы ауылы кешеләре менән бер исемлектә бирелә, сөнки Ҡарағай туғай утары әле рәсми рәүештә ауыл булып иҫәпләнмәй. 1816 йылда утарҙың 8 хужалығында 34 ир-ат, 40 ҡатын-ҡыҙ йәшәй. Бөтәһе 74 кеше, йәғни һәр бер хужалыҡҡа сама менән 9 кеше тура килә. Урмансыла 22 хужалыҡ, 134 ир-ат, 101 ҡатын-ҡыҙ, йәмғеһе 235 кеше йәшәй, һәр хужалыҡта уртаса 11 кеше.

Рәүиздә 26-сы һан аҫтында ауылға исем биреүсе 36 йәшлек йөҙбашы Кинйәбулат Ҡаҙбулатов һәм уның 9 йәшлек улы (һуңынан Маликовтарға исем-шәриф биргән баш балаһы) Абдулмалик яҙылған. Кинйәбулат 30 йәшлек Баллыбикә, 20 йәшлек Зөләйхә исемле ҡатындары, 4 йәшлек Мөслимә, 3 йәшлек Мөьминә тигән ҡыҙҙары менән тора. Утарҙағы 8 йорт хужаһының дүртеһе ике ҡатын менән йәшәй.

1850 йылда 9-сы рәүиз үткәрелә. Ул йылда Кинйәбулат ҡартҡа 70 йәш тулһа ла, уҙамандың йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ята. Ауылдың төҙөклөгөн, кешеләренең сәләмәтлеген, әхлаҡи сафлығын һаҡлауға, уларҙың тәүфиҡлы булыуына иң ҙур өлөш индергәндәрҙең береһе була ул. Шул йылда төҙөлгән исемлек, Кинйәбулат ауылы һәм Ейәнсура, Хәйбулла, Йылайыр райондарының күп ауылдары буйынса халыҡ иҫәбен алыу материалдары архивта әлегә табылманы. Буталсыҡ замандарҙа юғалғандыр, тигән фекер бар.

1857 йылда ауыл халҡы Ҡарағай туғай утарына Кинйәбулат ауылы тигән исем бирергә ҡарар итә. Ошо мәсьәлә буйынса ауыл аҡһаҡалдары Башҡорт ғәскәре башлығына мөрәжәғәт итә, ә ул губернаторға хат яҙа:

*"Господину Оренбургскому и Самарскому генерал-губернатору, командующего Башкирским войском*

*Рапорт.*

*Башкиры 3-го кантона №3 юрта выселка из дер. Урманчиной, называемого Карагай-Тугай, в числе 24-х домохозяев составили общественный приговор, в котором ходатайствуют о дозволении означенный выселок наименовать деревнею Кинзябулатовой.*

*Почтительнейше донося об этом Вашему Сиятельству, имею честь доложить, что с моей стороны не встречается препятствия к удовлетворению настоящего ходатайства означенных башкир, и потому о наименовании помянутого выселка деревнею Кинзябулатовою испрашиваю разрешения.*

*Генерал-лейтенант Билибинский.*
*8 февраля 1857 года, г.Оренбург".*
(ЦГИА РБ: Ф. И-2. Оп.1. Д. 9122)

Ихтирамлы Кинйәбулат ҡартҡа был ваҡытта 77 йәш була. Губернатор В.А.Перовский рөхсәт итеп яҙған хат та шул уҡ төргәктә табылды:

*"Господину Командующему Башкирским войском.*

*В следствие представления Вашего письма от 8 сего февраля за №1618, разрешаю дозволить башкирам 3-го кантона №3 юрта выселка Карагай-Тугай наименовать выселок этот деревнею Кинзябулатовой, я уведомляю об оном Вас для надлежащего распоряжения.*

*Генерал-адъютант граф Перовский".*

1859 йылда Рәсәйҙә һуңғы, унынсы рәүиз үткәрелә. Кинйәбулат ауылында халыҡ иҫәбен алыу 7 мартта ойошторола. Бөтә ауыл кешеләрен бер урынға йыйып, һәр кемдең исеме өс тапҡыр әйтелә. Ауыл башлығы 25 йәшлек Әбделғәни Кинйәбулат улы Ҡаҙбулатов дөрөҫләп, исемлеккә тамғаһын ҡуя. Бишенсе йорт старшинаһы Таҙлар ауылынан урядник Биктаһир Танғатар улы Дәүшәмбаев ҡултамғаһын ҡуйып, мисәт һуға. Бер-ике йылдан ҡайһы бер ауылдар буйынса тағы халыҡты сходка йыйып, Ырымбурҙан килгән һәм урындағы түрәләр менән рәүиздең дөрөҫлөгөн тикшереп сығалар. 1859 йылғы рәүиз буйынса, ауылда 24 хужалыҡ, 66 ир-ат, 76 ҡатын-ҡыҙ, бөтәһе 142 кеше йәшәй, һәр хужалыҡҡа уртаса 6 кеше тура килә.

Исемлектә беренсе булып Кинйәбулат ҡарт яҙылған, 79 йәш, зауряд-сотник, отставкала тип яҙылмаған. Уның менән бергә 23 йәшлек улы урядник Мөхәмәтхафиз тора, уның улы Заһиҙуллаға 1 ай ғына, ҡыҙы Мәрғүбәгә 3 йәш, ҡатыны Әсхәпямалға 21 йәш. Кинйәбулаттың әбейе Зөләйхә Йәнсәйет ҡыҙына 69 йәш. Кинйәбулат 1860 йылда 80 йәше тулғас вафат була. Уның 7 улы булғанлығы билдәле.

Исемлектә икенсе булып Кинйәбулат ҡарттың өсөнсө улы, 38 йәшлек зауряд-сотник, кантон ярҙамсыһы Баһауетдин яҙылған. Уның улы Шаһимарҙан 12 йәштә, ҡыҙҙары Бибинәғимәгә — 8, Шәмсикамалға — 3, ҡатынына 30 йәш.

Баһауетдин тураһында 1862 йылда яҙылған өсөнсө башҡорт кантоны түрәләренең формуляр исемлегендә әйтелә:

*"Зауряд-сотник Багаутдин Кинзябулатов — 41 год, из зауряд чиновных детей Оренбургской губернии. Магометанского закона. Имеет бронзовую медаль на Владимирской ленте в память войны 1853—1856 гг.*

*В службу вступил казаком в 1837 году 1 января в 10-й башкирский кантон. В мае-июле 1841г. — в сводном учебном башкирском полку.*

*С 15 мая по 15 ноября 1844 г. — в кантонном управлении для карауливания знамени.*

*С 1 января 1846 по 1 января 1847 гг. — в г. Оренбурге при башкирском Караван-Сарае.*

*22 мая 1847 г. — произведен в урядники в 10-ом кантоне.*

*С 16 мая 1848 г. по 31 июля 1850 г. — юртовой старшина.*

*С 1 мая по 1 октября 1851 г. — в сводном учебном башкирском полку, с 26 февраля 1853 г. — произведен в зауряд-хорунжие. С 1856 г.— в 3-м кантоне.*

*В 1858 г. — зауряд-сотник.*

*С 5 января 1859 г. по 30 января 1860 г. — кантонный помощник. В казенном заведении не воспитывался. Сверх настоящей обязанности особых поручений по Высочайшим повелениям и от начальства не имел. Русскую и тюркскую грамоту знает.*

*В 1854—55 гг. — ответственный по наблюдению за сплавом казенного леса по рекам Ик и Сакмаре.*

*Женат на одной — Хадиче Абдулнасыровой, дочери башкирца Юлмухаметова. Имеет сына Шагимардан 1846 г. июня 27 дня, дочерей Нагиму 1851 г. декабря 16 дня, Шамсикамал 1855 г. марта 3 дня".*

(ЦГИА РБ. Ф. И-2. Оп. 1. Д. 15041. л. 79)

Исемлектә өсөнсө булып 40 йәшлек указлы мулла Сабит теркәлгән — ул Кинйәбулаттың икенсе улы. Вафат булған тәүге ҡатынынан улы Ғәбделманнанға — 20, ҡыҙы Бибимәҙинәгә 9 йәш, 22 йәшлек икенсе ҡатыны Һөйәрсолтан Аралбаеванан ике улы бар — Шәғәлигә 3 йәш, Солтанғәлигә 6 ай.

Мулла Сабит миҫалында шуны әйтергә була: Кинйәбулат бабай малайҙарына хәрби хеҙмәт юлын ғына түгел, дини юлды ла күрһәткән. Сабитты ауыл халҡы мулла итеп һайлаған. Ул боронғоларҙан ҡалған йолаларҙы һаҡлаусы, өгөт-нәсихәт таратыусы, һәр нәмәлә кәңәшсе, ғөмүмән, заманы өсөн алдынғы кеше була.

Абдрахмановтарға исем-шәриф биргән Ғабдрахман, ике улын ҡалдырып, 1855 йылда донъя ҡуя. Тәүгеһе 19 йәшлек Шәрәфетдин (ҡатыны Нәзифәгә 16 йәш), икенсеһе 16 йәшлек Саҙретдин. Ғабдрахмандың тол ҡатыны Фәрхиямалға 36 йәш кенә, ҡыҙҙары Хөсниямалға — 12, Бибинәфисәгә — 9, Зәлифәгә 7 йәш була.

Исемлектә бишенсе булып Әбделғәни Кинйәбулатов яҙылған, уға 25 йәш, ҡатыны Ғәзизәгә — 24, ҡыҙы Мәрхиәгә 2 йәш. Әбделғәни ауыл етәксеһе. Исемлектә Кинйәбулатов тип яҙылһа ла, фамилияһы Ҡаҙбулатов.

Шулай итеп, исемлектәге тәүге 7 хужалыҡта Кинйәбулат ҡарт үҙе һәм уның уландары яҙылған. 1816 йылғы рәүиздә Кинйәбулаттың бер хужалығында 6 кеше була, 1859 йылда уның балалары 7 хужалыҡта 38 кеше теркәлгән.

Кинйәбулат, йөҙбашы булараҡ, йылдың һәр миҙгелендә йәшерәк ираттар менән Йылан тау битендә, ҡайһы берҙә Һүрәм буйындағы аҡландарҙа һуғыш күнекмәләре үткәрә. Һәр күнекмәне тәүҙә үҙе күрһәтеп бирә: ике уҡты ауыҙына ҡаба, тағы икеһе ҡулында була һәм шул дүрт уҡты атта сабып барған килеш тиҙ арала атып сәпкә тейҙерә. Шунда уҡ һөңгө менән сәнсә лә ҡылыс менән сәптәрҙе тураҡлай, суҡмар менән дә һуға. Мылтыҡтан атыуҙы ла өйрәтә.

Походҡа сығыр алдынан Кинйәбулат һәр яугирҙың шәхси ҡоралын, аттарын, әйберҙәрен тикшереп сыға. Һәр әйбер үҙ урынында, ҡорал таҙартылған, майланған булырға тейеш, ти йөҙбашы. Әгәр ҙә походта берәү уғын йәки башҡа берәй әйберен төшөрөп ҡалдыра икән, уның

артынан килеүсе атынан төшөп, теге әйберҙе алып, хужаһына бирергә тейеш. Атынан төшмәй, өндәшмәй уҙып китә икән, ундай кеше ышаныслыһыҙ, уның менән яуға барып булмай — уға шелтә бирелә, йәки ҡамсы менән һуҡтырыу осраҡтары ла була.

Кинйәбулат 40 йылдан ашыу йөҙбашы вазифаһын үтәй, күптәрҙең аталарын да, балаларын да һуғыш алымдарына өйрәтә. Ул йылына ике тапҡыр ир-атты сик хеҙмәтенә алып барған, ҡайһы берҙә йыл уртаһында ла барып тикшереп йөрөгән.

XIX быуат уртаһынан улуҫтар һәм кантондар ваҡлана. Башта 11 кантон булһа, һуңынан 28 кантон төҙөлә, кантондар ғәскәри йорттарға бүленә. Хәҙерге Ейәнсура районына ҡараған ауылдар XIX быуат башында 9, 10-сы кантондарҙа була. 1855 йылдан Кинйәбулат ауылы 3-сө башҡорт кантонының 5-се йортона ҡарай, ә уға тиклем — 10-сы кантонға. 1863 йылғы документ буйынса ауыл 1-се Ырымбур кантоны Ырымбур өйәҙе I Үҫәргән улуҫы Сәлих ауылы йәмғиәтенә ҡарай. Уға тағы Сәлих, Урмансы, Сиреғол, Байдәүләт, Сөләймән, Хоҙайбәндә ауылдары инә. Кантондар 1865 йылда бөтөрөлә.

1865 йылдың майында Ырымбур губернаһынан Өфө губернаһы айырылып сыға. Ырымбур губернаһына Верхнеуральский, Ырымбур, Троицкий һәм Силәбе өйәҙҙәре керә. Шул уҡ йылда Ырымбур һәм Верхнеуральский өйәҙҙәренең ҡайһы бер улуҫтарынан Орск өйәҙе төҙөлә һәм Орск станцияһы (элекке Орск ҡәлғәһе) өйәҙ ҡалаһы исемен ала. Кин-йәбулат ауылы шул Орск өйәҙенә ҡарай. XIX быуат аҙағынан ауыл I Үҫәргән улуҫына инә. Өйәҙҙәргә бүленеү 1917 йылға тиклем һаҡлана.

1877 йылда сыҡҡан ”Материалы по статистике, географии, истории и этнографии Оренбургской губернии” китабында Орск өйәҙе ауылдары алфавит буйынса яҙылған. Кинйәбулатта 27 хужалыҡта 214 кеше көн итә, һәр бер хужалыҡҡа уртаса 8 кеше тура килә, Урмансыла (Ибрай) 99 хужалыҡта — 582 кеше, Сәлихтә 50 хужалыҡта 352 кеше донъя көтә.

1901 йылда сыҡҡан китапта Кинйәбулат ауылында 28 хужалыҡ, 171 кеше, Ырымбурҙан 194 саҡырымда, тирмән барлығы тураһында әйтелә. Сәлихтә 86 хужалыҡ, 737 кеше йәшәй, ағас мәсет булған. Урмансыла 130 хужалыҡ, 772 кеше, шулай уҡ ағас мәсет була. Ауылда мәсет барлығы 1825 йылғы документта әйтелә. Урыҫ утарҙары Ново-Богдановкала 12 хужалыҡ, 109 кеше, Аҡкондоҙ йылғаһы буйындағы Репьевскийҙа 13 хужалыҡта 75 кеше йәшәгәнлеге яҙылған. Тимәк, был урыҫтар 1898 йылдан һуң күсеп килгән.

1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан автономияһы иғлан ителгәс, кантондар системаһы тергеҙелә. Кинйәбулат ауылы Үҫәргән кантоны Сәлих улуҫында була.

1919 йылдың 20 мартында Башҡортостан хөкүмәте Совет власы менән килешеү төҙөй һәм Совет автономияһы төҙөлә. Кесе Башҡортостан 13 кантонға бүленә, ә кантондар 134 улуҫтан тора. Был улуҫтарҙың 70-е — Ырымбур, 50-нән ашыуы Өфө губернаһына ҡарай.

Үҫәргән кантоны 15 улуҫҡа бүленә: Демократик-Ҡыуандыҡ, Ҡансура, Ҡороюл, Пайма, Сәлих, Һамар, Үҫәргән-Хәйбулла, I—VI Үҫәргән, Федоровка, Сабатар (урыҫса Чеботарево) улуҫтары.

Кинйәбулат ауылы XIX быуат аҙағынан I Үҫәргән, 1913 йылдан Сәлих йәки VII Үҫәргән улуҫына ҡарай. 1917 йылда улуҫта 6076 башҡорт йәшәй.

1922 йылдың 14 июнендә ВЦИК Өфө губернаһын юҡҡа сығарып, Оло Башҡортостан төҙөү тураһында декрет ҡабул итә һәм кантондарҙың исеме, күләме үҙгәрә. Июнь-октябрь айҙарында ауыл Ҡыпсаҡ-Үҫәргән кантонында була.

1922 йылдың 5 октябрендә БашЦИК ҡарары менән республика 8 кантонға бүленә, йәғни кантондар ҙурайтыла. Йылайыр кантоны элекке 6 кантонды берләштерә: бөтә Бөрйән-Түңгәүер кантоны — 14 улуҫ, Ҡыпсаҡ-Ете ер кантоны — 16 улуҫ, Үҫәргән кантоны — 18 улуҫ. Йәмғеһе 48 улуҫ. Кантон үҙәге — Преображенск (быға тиклем Преображенский завод). 1920 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу буйынса кантонда 99 мең кеше иҫәпләнә.

1923 йылдың ғинуар-апрель айҙарында БашЦИК Йылайыр кантонында улуҫтар һанын 48-ҙән 16-ға ҡалдыра, ауыл советтары һаны — 183, һуңғараҡ — 188.

1924 йылдың февралендә улуҫтарҙы эреләтеү мәсьәләһен Йылайыр кантоны ултырышында ҡарайҙар. Сәлих улуҫына тағы Демократик һәм I Үҫәргән улуҫтары ҡушыла. Улуҫ рәйесе Абдулла Хоҙайбәндин (исем-шәрифе ҡайһы ауылдан икәнлеген әйтеп тора — хәҙер ул ауылдың рәсми исеме Аҡҡондоҙ, йәғни боронғо исеменә ҡайтҡан) улуҫтың сиктәрен үҙгәрешһеҙ ҡалдырырға, ә резиденцияһын халыҡ һорауы буйынса I Үҫәргән улуҫының үҙәге Үрге Муйнаҡҡа күсерергә тәҡдим итә. Ул ауыл яңы ҙурайтылған улуҫ уртаһына тап килә, бында элекке улуҫтың ҙур йорто ла була. Ләкин күптәр, Үрге Муйнаҡ оло юлдан ситтә урынлашҡан һәм шуға күрә кантон органдары менән бәйләнеш насараясаҡ, тигәс, үҙәген Сәлих-Күгәрсен ауылында ҡалдыралар.

Бөтә Йылайыр кантонын урман, урман-ялан һәм яланлы өлөштәргә бүлергә була. Сәлих улуҫы ялан, урман-ялан сиктәренә тура килә.

1925 йылдың 19 ғинуарында Йылайыр кантоны советының III съезында кантон үҙәгенең исемен Йылайырға үҙгәртергә тигән ҡарар сығарыла. БашЦИК-тың Администрация комиссияһы был мәсьәләне ҡарап, ризалығын белдерә. Президиум да ҡаршы булмай, ләкин Мәскәү тәүҙә ризалашмай, тик һуңынан килешергә мәжбүр була, сөнки Преображенск исеме дини байрам менән бәйле.

1925 йылдың 30 сентябрендә БашЦИК Башҡортостандың көньяҡ сиген элекке замандағы кеүек Урал йылғаһына тиклем еткерергә тигән ҡарар ҡабул итә. Орск ҡалаһы ла Башҡортостанға инергә тейеш була. Ләкин Ырымбур ҙа, Мәскәү ҙә бының менән килешмәй, хатта урыҫ ауылдарын биреүҙе талап итәләр. 1926 йылдың июнендә ВЦИК ҡарары менән Сәлих улуҫынан 367 хужалыҡ (1761 кеше) Ырымбур өлкәһенә бирелә: урыҫ утарҙары Сергеевский, Аскаровский, Картинский, Ковыловский һәм башҡорт ауылдары Сабит, Асҡар.

Большевиктар илдә хужа булып алғас, бөтә Союз буйынса тәүге халыҡ иҫәбен алыуҙы 1926 йылдың декабрендә үткәрәләр. Кешеләр йәше, милләте, туған теле, тыуған урыны, ғаилә хәле, белеме, һаулығы һәм башҡалар тураһында 14 һорауға яуап бирә. Халыҡ иҫәбен алыу

материалдарын дөйөмләштереп эшкәрткәс, һәр кем тураһында яҙылған айырым бер бит ҡағыҙҙы Мәскәү күрһәтеүе буйынса юҡ итәләр һәм ҡыҙыҡлы тарихи сығанаҡтан киләһе быуын кешеләре мәхрүм ҡала. Әммә шулай ҙа һәр ауыл буйынса йорт хужаларының фамилияһы, исеме (атаһының исемен яҙырға ҡағыҙҙа урын етмәй ҡала), милләте, йортта нисә ир-ат, ҡатын-ҡыҙ барлығы яҙылған исемлек әлегә һаҡлана. Быньдай исемлек Кинйәбулат ауылы буйынса архивтан табылды. Кинйәбулат Күгәрсен ауыл советына ҡарай, 36 хужалыҡта 74 ир-ат, 98 ҡатын-ҡыҙ теркәлә. Сәлих улусында 54 ауыл һәм утар иҫәпләнә. Улар 9 ауыл советын тәшкил итә: Күгәрсен, Байдәүләт, Байсәләм, Бикбау, Бикҡужа, Муйнаҡ, Таҙлар, Үрген, Юлдыбай.

1930 йылдың 20 авгусында кантондар һәм улуҫтар бөтөрөлөп, 48 район төҙөлә. Ейәнсура районы Үҫәргән улуҫының 94 ауылынан, Сәлих улуҫының 52, Бөрйән-Ҡыпсаҡ улуҫының 10, Йылайыр, Һабыр улуҫтарынан берәр ауыл һәм бөтәһе 158 ауылдан төҙөлә. Район үҙәге — Йәнсура (Ҡыпсаҡ, Бәкәтәр) ауылы хәҙер Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районына инә. Иҫәнғол ауылы ул ваҡытта Мораҡ районында була, һуңынан Ырымбур өлкәһенә бирелә.

БашЦИК ҡарары менән 1935 йылдың 3 февралендә республикала 56 район ойошторола. Ейәнсура районы 13 ауыл советынан тора. Шул иҫәптән Иҫәнғол ауыл советы Ырымбур өлкәһенән күсерелә. Сәлих ауылы бер аҙ ваҡыт район үҙәге иҫәпләнә.

1930 йылда Кинйәбулат активистары партия күрһәтмәһе буйынса ауылда күмәк хужалыҡ төҙөргә була. Башта колхоз ауыл исемен йөрөтә. Бер нисә йылдан был исем район түрәләренә оҡшамай башлай, сөнки ”иҙеүсе” синыфтарҙан булған кешенең исеме партия идеологияһына тап килмәй. Колхоз етәкселәренә партия, хөкүмәт әһелдәре исемен ҡушырға тигән фарман әйтелә. 1935 йылдан Булашев исеме бирелә, ләкин 1937 йылдың октябрендә Башҡортостан хөкүмәте рәйесе З.Ғ.Булашевтың ”халыҡ дошманы” булыуы ”асыҡлана”. Тап ошо ваҡытта большевиктарҙың власҡа килеүенә 20 йыллыҡты киң билдәләргә йөрөйҙәр, һәм 1937 йылдың ноябрендә райком бюроһы колхозға ”Октябрҙең 20 йыллығы” исемен ҡушырға тигән ҡарар сығара. 50-се йылдар башында ул күрше Сталин исемендәге колхозға ҡушылып, 4-се бригада булып йөрөй. Аҙаҡ, Сталиндың яуызлығы асыҡланғас, 1961 йылдың 8 декабрендә колхоз йыйылышында элекке исеме — ”Урал” кире ҡайтарыла, райком быны 1962 йылдың 7 февралендә раҫлай.

1920—1925 йылдарҙа күрше Ырымбур губернаһы Ҡырғыҙстан АССР-ы (аҙаҡ Ҡаҙағстан) составында була. Ошо йылдарҙа Башҡортостанды ла шунда ҡушыу тураһында Стәрлелә, Өфөлә ныҡышмалы һүҙ бара. Был хәл Мәскәүҙе ҡурҡыуға һала. Башҡорттар ҡаҙаҡтар менән ҡушылып ҡуймағайы тип, ВЦИК 1925 йылдың 6 апрелендә айырым Ырымбур буфер губернаһын төҙөү тураһында ҡарар сығара. Һөҙөмтәлә ике төрки халҡы араһында оҙон һәм киң кәртә төҙөлә.

Ырымбур губернаһында (1928 йылдан — округ, 1934 йылдан — өлкә) ВЦИК ҡарары менән райондарға бүлеү 1927 йылда башлана. Был күрше өлкә Башҡортостандан бәләкәй булһа ла, 1934 йылда унда 52 район була.